*Гүзәл СИТДИҠОВА*

# Йәннәт баҡсаһы

### «Памятник»

Учалы районының Баттал ауылы Европаның Азия менән ҡауышыр еренән алыҫ түгел урынлашҡан. Ап-аҡ мәктәп һуштарынды алмалы матур тау башында әллә ҡайҙан сәләмләй, ә уның тирәһендә әле бер, әле икенсе ерҙән донъяның иң даһи рәссам-архитекторҙары ла ижад итә алмаҫлыҡ зөмрәттәй бәрхәт биҙәкле һарыҡташтар һибелгән. Аҫылташтарың ары торһон! Сит ил кешеләре күрһә, донъяларын онотторҙар ине. Ә урындағы халыҡтың гүзәллеккә күҙе өйрәнгән, хатта мәктәп алдындағыһын, бульдозер саҡыртып, алып ташлатырға ла йөрөгәндәр.

И, Хаҡ тәғәләбеҙ беҙгә бүләк иткән ғәзиз еребеҙ! Шағир әйтмешләй, һүрәтләп бөтөрөргә телебеҙ зәғиф.

Ауылға етәрәк уйһыулыҡта өйкөм-өйкөм ҡыуаҡ үҫкән ерҙе күрһәтеп, юлдаштарым бик әһәмиәтле итеп, был урынды халыҡ «Памятник» тип йөрөтә, тип әйтеп ҡуйҙы. Учалыларҙың шундай ғәҙәте бар — һүҙгә мая ҡуйырҙар ҙа шунда уҡ эсенә инеп китмәҫтәр. Бесәй уйнатҡан ише, әүрәткесте бер аҙ ялт-йолт килтереп, үҙең тамам йотлоғоп тыңлар хәлгә еткәс кенә, тәмен белеп, шартына килтереп, хәбәргә тотонорҙар.

Фәһемле риүәйәттәргә һиҙгерлеге бар күңелдең, фекер ебен юғалтырмай ғына тиҙерәк төбөнә төшөргә тырышып, түҙемһеҙләнеп, «Волга»ның артҡы урындығында килгән юлдаштарыма боролоп уҡ ултырҙым. Ә улар ашыҡмай, әле бер тәҙрәнән, әле икенсеһенән күҙ һалып, үҙҙәренә генә билдәле маҡсат менән, үҙҙәренә кәрәк урындарҙы байҡайҙар, нимәнелер күреп, «һә, улай икән», тип ҡуялар. Ауыҙҙарынан һүҙҙәрен ҡыҫҡыс менән тартып алырҙай булдым. Ниһайәт, теге тарихҡа ла сират етте һәм тетрәткес бер ваҡиғаны ишетергә насип булды миңә был көндө.

Әлеге урында электән иген иккәндәр. Урманы ҡуйыраҡ, ҡыуаҡлығы ҙурыраҡ булған, ҡош-кейеге мыжғып торған, тиҙәр ул саҡта. Колхоз ураҡҡа төшкәс, күләгәрәк ерҙә стан яһағандар — барынса ялғап, аш яраштырып, ҡарағат, еләк япраҡтары, мәтрүшкә һалып, хуш еҫле сәй ҡайнатҡандар. Усаҡта бешкән аш үҙенә башҡа, телеңде йоторлоҡ була бит ул, итһеҙ һалма ғына булһа ла.

Ураҡсылар янып-бешеп иген урғанда, берәүһе ҡоралай бәрәсенә юлыға. Бәләкәс кенә йән эйәһенең хәүефләнеп баҡырып ебәргәнен ишетеп, табыш эйәһе янына иптәштәре йүгереп килеп етә. Ҡыҙыҡһынып ҡарайҙар, игенде йырып сыға алмай аҙашҡандыр, тип йәлләп ҡуялар. Бәрәсте тапҡан ир ҡыуаҡлыҡтар яғына ыңғайлай. Уның ниәтен башҡалар башта аңламай ҙа тора, әммә бысаҡҡа тотонғанын күргәс, һәммәһе лә вәхшиҙең янына абына-һөрөнә килеп етә:

— Туйымлыҡмы һуң инде шул, ике ҡабып бер йоторлоҡ ҡына ите бар, сабый ғына бит әле ул, — ти береһе.

— Ай-һай, ҡорҙаш, ҡоралайҙың ҡарғышын алырһың, уларҙың ҙурына ла тейергә ололар бик рөхсәт итмәй торғайны, аслыҡ йылы ғына булмаһа, — тип өҫтәй икенсеһе.

— Ебәр, ана, инәһе урман эсенән тауыш бирә, — тип һуңғы дәлил килтерә өсөнсөһө.

Тыңламай береһен дә күҙе тонған йыртҡыс:

— Тапҡанһығыҙ йәлләр нәмә, улар беҙ ашар өсөн яралтылған, — тип яуаплай.

Сала, усаҡ яғып, өтөп ашай. Ә урман эсендә инә ҡоралай кеше тауышына оҡшатып, иңрәп илай.

Хикәйәселәрем тынып ҡала, мин дә ҡыуаҡлыҡтар тороп ҡалған яҡтан күҙемде ала алмай, йөрәгемдең әрнеп-әрнеп һулҡылдағанын тыңлайым. Тәүбә-тәүбә, бала ҡайғылары күрһәтмәһен аллам, тип вәхшиҙәр тарафынан шундай ҡайғыларға дусар ителгән әсәләрҙе иҫкә төшөрәм. Хажда хатта себен кеүек бөжәктәрҙе лә үлтерергә рөхсәт ителмәгәнлеге күңелемә килә. Беҙҙе бит Бөйөк Хакимыбыҙ бер бөтөн итеп яралтҡан, һәр йән эйәһе — уның камил ижады, ә һәр үлән ҡыяғына «Аллаһ» һүҙе яҙылған, тип өйрәтә Ҡөрьәнебеҙ. Беҙ, насар, тип уйлағандарында ла бер хикмәт барҙыр, улар ергә юҡҡа ебәрелмәгәндер.

Ә был — һис зыянһыҙ, матурлығы менән донъябыҙҙы биҙәгән, ата-бабаларыбыҙ хатта заманында изгеләр иҫәбенә индергән йән эйәһе бит ул.

Телебеҙ аңҡауыбыҙға йәбешкәндәй, шымып килә торғас, йәнә һүҙҙе дауам итер хәлгә ҡайттыҡ, ниһайәт.

— Шуның өсөн «Памятник» тип атағандармы ни? — тип һорап ҡуйҙым.

— Юҡ, уныһы икенсе ваҡиға — бынығының дауамы, — тине юлдаштарымдың береһе һәм дауам итте:

— Йылдар үтеү менән әлеге ҡырағайлыҡ онотола төшкән. Йәнә шул яланға иген урырға сыҡҡандар. Теге ағайҙың улы механизаторлыҡҡа уҡып ҡайтҡайны, ул да ошо бригадаға эләккән. Тырышып ҡына эшләгәндәй күренә ине. Ә атаһы «йәшел йылан» менән дуҫлашып алды, шулай ҙа ул да кеше рәтенән ураҡҡа сыҡҡан булды. Әҙерәк ҡыбырлай бирә лә, әсе-сөсөһөн һурып, еләҫтә ята ла йоҡлай.

Ҡыҫҡаһы, бер көндө иген араһына иҫереп йығылған, ҡәһәрең. Малайы, күрмәйенсә, сапҡысы менән өҫтөнән уҙған да киткән. Нәҡ теге ҡоралай бәрәсе табылған урында. Шунан бирле «Памятник» тип атала ла инде был урын.

Кире ҡайтҡанда күҙҙәремде ала алмай ҡараным хәтерҙәрҙә уйылып ҡалырлыҡ, исем бирҙертерлек ғибрәтле фажиғә булған яланға. Һәр йән эйәһен Аллаһы тәғәлә ижады тип табынған халыҡ ҡына ваҡиғаға анауындай тәрән мәғәнә һалып, анауындай фәһемле исем бирә алалыр. Телгә алған һайын вәхшилектән, оңҡотлоҡтан тыйыу, тәбиғәтте ҡурсыу булып яңғырай был атама — «Памятник».

## Йән тартмаһа ла...

«Аллаһы тәғәлә кешеләрҙе үҙе төрлө раса, төрлө милләт итеп яралтҡан, донъя яралтылырҙан меңдәрсә йыл әүәл үк һәр беребеҙҙең ниндәй заманда, ниндәй Ватанда, ниндәй милләттән, ниндәй ата-әсәнән тыуырыбыҙҙы билдәләп ҡуйған. Ошо була ул — тәҡдир. Быларҙың һәр береһен ул беҙгә аманат итеп тапшырған. Балаларыбыҙ, хәләл ефетебеҙ, йәнебеҙ-тәнебеҙ, эшебеҙ, туғандарыбыҙ, күршеләребеҙ, таныштарыбыҙ, хеҙмәттәштәребеҙ, Ер үҙе — беҙгә аманат. Аманатҡа хыянат ҡылма: был — диндән», — тип әйткәйнем. Ә бит беҙ аманатҡа хыянат ҡылыусыларға әүерелә яҙып, әүерелә яҙып ҡалдыҡ түгелме?!

Беҙҙең быуында телебеҙҙән, милләтебеҙҙән кәмһенеү хисе мәктәптә тәрбиәләнде. Ҡайһы ғына тарих китабын алып ҡарама, беҙ — төрки халыҡтар — совет осорона тиклем үҙ яҙмаһы, мәҙәниәте, әҙәбиәте булмаған, урта быуаттар кимәлендә ҡалған милләттәр рәүешендә һүрәтләндек. Егерменсе быуатта ғына ҡойроғобоҙ өҙөлөп, ағастан төшкәнбеҙ, әйтерһең. Әйтерһең, иҫке төрки менән яҙылған китаптарыбыҙ ҙа, һәр һүҙенән «Геродот аңҡып торған» шағирҙарыбыҙ ҙа, әүлиәләребеҙ ҙә, аҡыл эйәләребеҙ ҙә булмаған. Әйтерһең, һәр халыҡ үҙенә үҙе алфавит уйлап сығарған, башҡа халыҡтарҙыҡын үҙләштермәгән. Әлеге көндә Рәсәйҙә ҡулланылған алфавит авторҙары Кирилл да, Мефодий ҙа урыҫ булмаған дабаһа...

Европа әҙәбиәте, мәҙәниәте генә өйрәнелде, һанға һуғылды, төркиҙәр уларға эйәрергә маташып, күҙгә эленерлек артыҡ бер ни ижад итә алманы. Теге, ҡарға һайыҫҡанға оҡшатып йөрөйөм тип, үҙ йөрөшөн онотҡан, тигән рәүешле инде. Был йәнә «артта ҡалғанлыҡ»ҡа бер дәлил кеүек ҡабул ителде. Кәмһенеү тойғоһо тәбиғи оялсанлығыбыҙға өҫтәлеп, миктәтте, битарафҡа әүерелдерә яҙҙы.

Дөрөҫ әйткән Зәки ағабыҙ — аҡтамыр кеүекбеҙ икән. Үҙгәртеп ҡороу елдәре башта һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә иҫкеләп торҙо республикабыҙҙа, бер мәл аҡман-тоҡман уйнатырға тотондо, бығаса ойоп ҡына ятҡан милли үҙаң тойғоһон да уятты, сафтарға әйҙәне. Илде киҫкен боролош яһатҡан ошо егерме йыл эсендә әллә күпме юғалттыҡ, әммә табышыбыҙ күберәктер — егерме беренсе быуатҡа беҙ Ватанлы, Президентлы, әләмле, герблы, гимнлы, телле булып аяҡ баҫтыҡ.

1990 йылдан Белоретта саф башҡортса район-ҡала гәзитен тергеҙеп сығара башланыҡ. Әллә күпме аяҡ салып маташтылар, ишеттермәгән һүҙ ҡалдырманылар. Аҡтамырыбыҙ милләткә һөйөүҙән һут алды, ҡояшҡа үрләтте. Әле булһа шул саҡтағы ныҡышмалылығыбыҙға, ҡыйыулығыбыҙға, ҡара тырышлығыбыҙға таң ҡалам.

Гәзитебеҙгә мәғлүмәт бирмәй интектерәләр, һәр һандан «бөрсә» эҙләйҙәр. Шулай ҙа бирешмәнек, бер генә һанын да өҙмәнек «Урал»ыбыҙҙың. Берәү, нисә тура килһәң дә, инглиз телендә сыҡҡан гәзиткә ҡапланып ултырыр ине. Ситтән килгән әҙәм ине ул, ҡатыны — мәрйә. Бер мәл нотоҡ уҡып ташланы:

— Халыҡты артҡа һөйрәү бит ул башҡортса гәзит сығарыу. Хәҙер донъяла инглиз теле өҫтөнлөк тота һәм тиҙҙән бер ул ғына кәрәк

буласаҡ. Ауыл ҡапҡаһынан сыҡҡансы ғына кәрәк бит ул башҡорт теле, оҙаҡламай урыҫ теленең дә кәрәге ҡалмаясаҡ. Инглиз телендә сығара башлаһаң гәзитте, аңлар һәм хуплар ғына инем. Ә былай — йөрөйһөң кешенең ваҡытын алып, кем уҡый һеҙ яҙғанды!

— Нисек кенә инглиз телен маҡтаһағыҙ ҙа, әсәйегеҙҙең наҙлап әйткән һүҙҙәре ҡолаҡ төбөгөҙҙә яңғырап торасаҡ, иң хәтәр мәлегеҙҙә уның тауышы, фатихаһы иҫегеҙгә төшәсәк барыбер, — тинем, хәтерем ҡалып.

Әйткәндәрем шул тиклем дә раҫ килер икән. Ҡаты сирләп китеп, телдән ҡалған был кеше. Арыулана башлағас, бер синыфташының юлы төшөп, хәл белешә барған. Хужабикә менән булған һөйләшеүен ишеттерҙеләр:

— Зинһар, һөйләшә бирегеҙ, һеҙҙеңсә аңлай ул, бына шул-шул нәмәләрҙе әйтегеҙ әле уға, — тип үтенгән икән меҫкен ҡатын.

Ҡапҡанан сыҡҡансы ғына, тигән туған теле йән сыҡҡансы кәрәк икән шул әҙәмгә. Йән тартмаһа ла, ҡан тарта. Аллам һаҡлаһын... Хаҡ тәғәләбеҙҙең аманатҡа — туған телгә, ҡанбабаларына — хыянат өсөн биргән язаһы булғандыр, тип тә уйлап ҡуям.

## **Йотолорбоҙмо**?

Жюри менән йыйылып, «Һылыуҡай» конкурсында ҡатнашыусыларҙың «мәрәй»ҙәрен һанап сығарған арала, бәхәс килеп тыуҙы. Бер һылыу уңышлы сығыш яһаны: етеҙ, һәр һөйәге бейеп торған терегөмөштәй ҡыҙ — уңғандыр ҙа үҙе, әммә, стандартҡа тап килмәй, тип, артҡараҡ ҡалдырҙылар. Европа стандарттарына инде. Башҡорт һылыуын сит ҡалыпҡа һалып баһаларға мөмкинме һуң?! Йәнәһе, бөтә донъя шулай үткәрә конкурстарҙы... Милләттеке итеп үткәрәбеҙ икән, иң тәүҙә ҡәүемебеҙҙе ишәйтер зат образын кәүҙәләндерергә тейешбеҙ, тип һанайым. Халҡыбыҙҙа ыҡсым кәүҙәле, уймаҡ ауыҙлы, ҡарлуғас ҡанатылай ҡашлы, бер бите айҙай, бер бите ҡояштай түңәрәк битле, һыу һөлөгөләй хәрәкәтсән, тилберҙәр ғүмер баҡый һылыу һаналған.

Егеттәребеҙгә иһә сит образ маҡтала, улар шул стандарттарға ҡарап, ауыҙ һыуын ҡорота. Тамырыбыҙҙы ҡоротоуға йүнәлдерелгән был сәйәсәт беҙҙе һуҡырайтып, глобализм тип аталған аяуһыҙ машина аҫтына этәрә.

XXI быуатты глобалләштереү дәүере тип беҙҙең аңыбыҙға тиҫтәләрсә йыл һеңдереп киләләр. Бар донъяны бер унитар дәүләт итергә хыяллана космополит олигархтар. Улар, таҫма телләнеп, был идеяға бик матур төҫ бирергә тырышһа ла, Рим клубының аналитик эшләнмәләренә ҡарағанда, глобалләштереүселәр ер йөҙөндә иң күбе миллиард кеше — «алтын миллиард» ҡына ҡалыуын маҡсатҡа ярашлы тип таба. Ҡалған халыҡ сүплеккә сығарып ташланырға тейеш.

Һис шикһеҙ, глобалләштереүҙең төп дошманы — ул милли идеяға таянған рухи-сәйәси аң, сөнки унитар космополитик дәүләттә милли идеяға урын юҡ, тимәк, глобалистик утопия хаҡына милләттәр, уларҙың рухи, әхлаҡи ҡанундары юҡҡа сығырға тейеш. Ана шуға

ла масскультура тип аталған нәмә эфир, экран, баҫма продукция һәм башҡалар аша беҙҙең йәнебеҙгә, аңыбыҙға йылан булып шыуышып инә, таш йылғалай баҫып килә. Маҡсат — милли мәҙәниәтте, әҙәбиәтте юҡҡа сығарыу, көсһеҙләндереү, локаль күренеш кенә итеп ҡалдырыу.

Глобалистар яуҙырған баллы һүҙҙәр беҙҙе, кеше бөтә донъя гражданына әүереләсәк, тип әүрәтә, йәнәһе, ер шарының ҡайһы нөктәһенә килһәң дә — һин үҙ Ватаныңда. Әммә шул Ватанда беҙгә, еренән, асыл Ватанынан айырылырға тейешле башҡортҡа, урын табылырмы, беҙ шул «алтын миллиард» иҫәбенә инербеҙме? Бөгөнгө беҙҙең закондар ер аҫтын да, ер өҫтөн дә, хатта һауаның һуларлығынан башҡаһын һатып, алыу-һатыу тауары иткән мәлдә, милләтебеҙҙең нимәһе ҡала?

Беҙ, башҡорттар, иртәгебеҙҙе нисек күҙаллайбыҙ? Ата-бабаларыбыҙ ере тип кенә түгел, ейән-бүләләребеҙ ере был, тип әйтерлек нимә ижтиһад ҡылабыҙ? Әллә беҙҙең тарих арбаһында артҡа ҡарап ултырған килеш офоҡтағы монарҙа ҡалған үткәндәргә үҙ сырамытыуыбыҙҙы һалып моңайыуҙан башҡаға көсөбөҙ самалыраҡмы? Туҡтауһыҙ артҡа ҡарап әсенеп барыу алдағыны күреүҙән генә түгел, бөгөнгөбөҙҙөң тәмен белеүҙән дә мәхрүм итә. Сығып килгән ҡояшҡа ҡарап ижтиһад итергә тейеш илем, тип янған шәхес.

Хәҙер идеология юҡ, фекер төрлөлөгөнә өҫтөнлөк бирелә, тиеү — буш һүҙ. Глобализм тигән көслө идеология бар, һәм, көслөнөкө — замана, тип йәшәгән хаяһыҙҙар донъяһында беҙҙең берҙән-бер ҡоралыбыҙ — рух көсө, иман, арҡадашлыҡ.

Әммә ҡойолоп төшөргә лә ярамай, Урал ташынан да ҡатыраҡ булһаҡ, ҡомдай ишелеп бармаһаҡ, зар илауҙан туҡтап, алға күҙ һалһаҡ, иманыбыҙҙы, рухыбыҙҙы еңеүгә көйләһәк, һәр беребеҙ унға торошло эш башҡарһаҡ, бирешмәбеҙ. Бында ваҡ нәмә юҡ — хатта «Һылыуҡай» тигән ябай ғына конкурс булһа ла. Беҙ үҙебеҙсә матур, үҙебеҙсә моңло, үҙебеҙсә уйлы.

Мосолман илдәрендә, ғөмүмән, ундай конкурстар үткәрмәйҙәр, һәм ҡыҙҙары башҡа илдәрҙә үткәрелгәнендә лә ҡатнашмай. «Уң да юҡ, һул да юҡ, үҙе тотҡан юл да юҡ» халыҡ рәүешле йәшәмәйҙәр. Мөхәммәт пәйғәмбәребеҙ әйткән, кем башҡа ҡәүемдәргә оҡшарға тырышһа, ул шул ҡәүемдән булыр, тип. Мәңге бөтмәҫ милләт булайыҡ тиһәк, барабан ҡаҡһалар, барабан артынан, ҡумыҙ тартһалар, ҡумыҙ артынан китергә тормайыҡ.

Һылыуҡай һайлау, депутат һайлау, ил башлығын һайлау... Һәр береһе милләт яҙмышына йоғонто яһай торған күренеш былар, шуны онотмайыҡ. Һайлауҙар яҡынайҙымы, глобалләштереү тигән ғифриттең алыҫтан килгән ипкене һиҙелә башлай, ә ниндәй ҡурҡыныс ул тын, бигерәк тә етәкселек өсөн көрәш барғанда.

Бәғзе бер зыялыларыбыҙ араһында туҙға яҙмаған, власҡа оппозиция-ла тороу, тигән фекер алға һөрөлөүе лә аҙаштырыуға йүнәлтелгән ағыу ул. Беҙгә әле булғанын һаҡларға, нығытырға кәрәк. Бөйөк Аҡмуллабыҙ әйтмешләй:

Арғымағың яманлап,
Толпар ҡайҙан табырһың,
Тойғоноңдо яманлап,
Шоңҡар ҡайҙан табырһың,
Хакимыңды яманлап,
Ғәҙелен ҡайҙан табырһың,
Хужаларың яманлап,
Артығын ҡайҙан табырһың.
Үҙ башыңды ҙур итеп
Тиңдәш ҡайҙан табырһың.

Әммә власҡа ярамһаҡлыҡ менән терәк булыуҙы бутамайыҡ. Был икеһе ике әйбер. Ярамһаҡлыҡ — серек таяу, ә терәк булыу — ул һәр изге башланғыста ярҙам, ил-көн хәлен дөрөҫ аңлап, халыҡтың рухын нығытыуға ал-ял белмәй хеҙмәт итеү. Ил тәхетенә башы йөҙөмдәй генә ҙурлыҡ ҡара хәбәш (эфиоп) ултыртылһа ла — буйһоноғоҙ, тигән Рәсүлебеҙ. Пәйғәмбәребеҙҙең шулай уҡ, бөтөр милләттең күренеклеләре бер-береһенә ташланыр, тигән мәғәнәле хәҙисе лә бар. Бәғзе берәүҙәребеҙ имеш-мимешкә ышанып, ғәйбәт, уйҙырмалар тарата, ниндәйҙер шәхси ҡәнәғәтһеҙлек нигеҙендә хөсөт тыуҙыра, үҙҙәренең эшлекһеҙлеге, һәлкәүлеге, һәләтһеҙлеге арҡаһында тыуған уңышһыҙлыҡтары өсөн үс ала. Шул хәлдәрҙе бар донъяға яр итеп, милләтте ҡаҡшата, көлкөгә ҡалдыра. Беҙ бүтән милләттәр алдында яҡшы данығыҙҙы таратайыҡ, шул саҡта йәштәребеҙ милләтенән кәмһенмәҫ, үҙен башҡа ҡәүем кешеһе итеп күрһәтергә ынтылмаҫ.

Мосолман дин ҡәрҙәшенең етмеш гөнаһын йәшерһен, тип өйрәтә динебеҙ. Ә гөнаһтар мәғлүм ителгән һайын, хәбәре кеше араһында таралған һайын ҡеүәтләнә. Ҡасан ғына әле бер кешенең үлтерелеүе шаҡ ҡатыра, нәфрәт уята ине. Хәҙер быны хатта ғәҙәти хәл рәүешле ҡабул итә башланыҡ, күңелебеҙ ҡатты, ә енәйәтселек артҡандан-арта, ҡурҡынысыраҡ төҫкә инә бара.

Бөйөк Әхмәтзәки Вәлиди Туған хаҡлы — динде, йәғни иманды, һәм телде һаҡлаһаҡ ҡына, Башҡортостан тигән дәүләтебеҙҙе, исемебеҙҙе һаҡлап ҡала алырбыҙ.

## Һарут менән Марут ғилеме

Ҡунаҡханаһыҙ ҡасабаның элекке дөйөм мунсала урынлашҡан «мәҙәниәт усағы»нда гәзитебеҙ хеҙмәткәрҙәре әҙерләгән әҙәби-музыкаль кисәне ғүмерҙә тере артист күрмәгән халыҡ кәмендә Фәриҙә Ҡудашева, Мәғәфүр Хисмәтуллин, Арыҫлан Мөбәрәков сығыштарылай алҡышлап, яратып ҡарағандан һуң, бер апай беҙҙе үҙҙәренә алып ҡайтты. Ҡарты менән икәүҙән-икәү йәшәйҙәр икән, балалары булмаған.

Еләктән генә ҡойғайным, тип ҡыҫтап-ҡыҫтап та беҙгә өгөтө үтмәгәс, апайҙың үҙенә күберәк тамып ҡуйҙы, ахыры, уфылдай-уфылдай серҙәрен сисеп ташланы:

— Əх, һылыуҙар. Үтте инде ғүмерем заяға... Шәп ирем бар ине минең. Үҙе матур, үҙе аҡыллы, үҙе моңло. Икебеҙ ҙә студент. Каникулда киттек ҡартинәйем янына, йәнәһе, кейәү күрһәтәм инде. Йыйылдыҡ, кис ултырҙыҡ, бөтәһенә лә оҡшаны хәләлем. Ҡартинәйем усҡа ҡарап, кешенең яҙмышын юрарға маһир ине. Иртәгеһенә тот та һора тегенән, киләсәктә мине ни көтә, тип. Алды усымды, ҡарап-ҡарап торҙо ла, һин ике ирҙә булаһың, тип әйтте лә һалды. Башыма һалҡын һыу ҡойҙолармы ни!

Шунда уҡ аласыҡтан сығып, йәремә:

— Минең ирем икенсе кеше буласаҡ, бөгөн үк айырылайыҡ, мин ысын яҙмышымды тиҙерәк табырға теләйем. Икенсе иргә сығырға тейешмен икән, һинең менән йәшәү әхлаҡһыҙлыҡ буласаҡ, — тип, уны шаңҡыттым.

Тәүҙә шаяртыуға һанағайны, ысынлап ныҡышыуымды дауам иткәс, комсомолдар хөрәфәткә ышанырға тейеш түгел, тип өгөтләп ҡараны, хатта илап та алды. Юҡ, үҙ туҡһаным туҡһан, ҡайтып кит, мин бөгөндән һинеке түгел, тип ҡыуҙым да ебәрҙем. Бына шулай килеп сыҡтым мин һеҙҙең яҡтарға йәшлек иҫәрлегем менән.

Ғүмер буйы мәктәптә эшләп ялға сыҡҡан апайҙың йәш сағындағы ҡылығын кәмит итеп яҙһаң да ышанмаҫтар...

Бәғзе берәү көнөн төрлө ерҙән ҡырҡып, йыйып алған йондоҙнамәләрҙәге юрауҙарҙы ентекле өйрәнеүҙән башлай, ғәмәлдәрен дә шуларға ярашлы ҡора. Ниндәйҙер эш өсөн яйһыҙ, тип әйтелдеме, ауыҙын эт ялаһа ла, ҡыуып ебәрергә ҡыл да ҡыбырлатмаясаҡ. Уңышлы тигән мәлендә иһә телен арҡыры тешләп, йән-фарман сабауыллай, уныһынабыныһына тотона, әммә һис мандымай.

Ундайҙар өҫтәл артында бергә тура килдеме, бысаҡ ашаһынан берәй нәмә бирә күрмә — ашың таш булып ятырлыҡ өгөт-нәсихәт уҡыр. Юлға сығыр алдынан машинаның алдынан үтмә — юлың уңмаҫ, сатнаған һауыт тотма — хәйерселек көҫәй, юллыҡһыҙ бәндә осраһа — кире борол кеүек бөткөһөҙ юрамыштары менән балҡып ҡына сығып килгән ҡояшыңды ҡара болот эсенә кәйелдерә.

Һуңғы йылдарҙа ҡайһы ғына баҫманы алып ҡарама, урыҫса ғына түгел, башҡортса менән татарсаһында ла — йондоҙнамә. Уҡыусыны ылыҡтырыр өсөн кәрәк, тиҙәр... Заманында үҙем дә шул ғәләмәттең ҡолона әүерелә яҙҙым, хатта байтаҡ ҡына махсус китаптарым да йыйылып киткәйне. Кеше тигәнең һәр саҡ алда ни көткәнен белергә ынтыла, бәғзе берәүҙәр хатта үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе, ғаиләне йондоҙнамәләрҙәге ҡылыҡһырлауға таянып ҡорорға тырыша.

Әйткәндәй, мине, ҡытайҙар менән япондар ошо ғилемгә таянып эш итәләр, имеш, тигән иҫбатлау вәсвәсәләне. Ышту һин, анау хәтлем юғары мәҙәниәтле, береһе борон, береһе бөгөн дан тотҡан халыҡтар шулай итһен дә... Үкенес, хатта ҡайһы бер аҙашыуҙарым ташҡа ла баҫылды.

Динде ныҡлы өйрәнә башлағас, ҡулыма пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһиссәләмдең хәҙистәре килеп юлыҡты. Йондоҙҙар буйынса юрау ғилемен өйрәнеүсе сихырҙың бер тармағына инеүсе булыр, тигән һөйләмде күреп, ҡойолоп төштөм, сөнки сихыр тамуҡҡа индереүсе ҙур гөнаһтар-

ҙан һанала. Бер аҙҙан уҡырға насип булған Ҡөрьәндең «Бәҡара» сүрәһендәге 102-се аят мине был яман мауығыуымдан тамам биҙҙерҙе.

Аят йәһүдтәрҙең Сөләймән ғәләйһиссәләмде сихырсылыҡта ғәйепләүен инҡар итә, һәм сихыр ғилемен Һарут менән Марут исемле ике фәрештә, әҙәм һынына инеп, кешеләргә өйрәтеүен аңлата. Улар башта: «Аллаһы тәғәлә беҙҙе был нәмә менән халыҡты һынау өсөн ебәрҙе. Һин сихырҙы дөрөҫ тип ышаныу менән кафыр булма», — тип, өйрәнергә теләүсене киҫәтә торған булғандар.

Беҙ ҙә бит сихыр кафырлыҡ икәнен беләбеҙ, әммә, аңлапмы-аңламаймы, йондоҙнамәгә, юрауҙарға йәбешеп ятабыҙ. Хәҙер ана «фэн-шуй» тигән нәмә көндән-көн үҙ табыныусыларын арттыра. Имеш, шкаф урынында ултырмаһа, ауырырһың, байыҡҡың килһә, аҡса гөлө ултырт. Һәм шул һаташыуҙарға ышаныусылары ла табылып тора бит әле. Уйламай ғына Аллаға тиңдәш табалар, әйтерһең, гөл нимәнелер хәл итә, яҙмышыңды үҙгәртә ала!

Мәжүсилектән ҡалған төрлө ырым-хөрәфәттәргә ышаныу, әүлиәләр ҡәберенә табыныу ҙа — көфөрлөк, тамуҡҡа илтеүсе юл, сөнки был да Аллаға тиңдәш, хатта Унан ҡеүәтлерәк көс барына инаныу. Алланың ризалығы, рөхсәте булмаһа, бер көс тә кешегә зыян-зәүрәт килтерә йә ярҙам итә алмай, беҙ бары тик Ғәзизебеҙҙән, Хакимыбыҙҙан ҡурҡырға тейеш. «Ғимран ғаиләһе» сүрәһенең 175-се аятында Аллаһу Собханә Тәғәлә: «Шайтан үҙ ялсыларын ҡурҡыныс итеп күрһәтергә тырыша; әммә һеҙ уларҙан түгел, ә иманлы булһағыҙ, Минән ҡурҡығыҙ», — тигән. Ырымсы, юраусы үҙе лә, уға барған, һүҙҙәренә ышанған кеше лә — тамуҡ әһелдәренән, тип әйтелә хәҙистәрҙә.

Ризаитдин бине Фәхретдин үҙенең «Жәвәмиғул Кәрим шәрхе» китабында Хөсәйенбәк кәшәнәһенә табынырға йөрөүҙең дингә һыймаҫ шөғөл икәнен яҙа һәм Төркөстандағы Әхмәт Йәсәүи һәм Үзбәкстандағы бер әүлиә ҡәбере янында ҡылынған иманһыҙлыҡтарҙы һүрәтләй. Баҡһаң, бер имам ҡомға күмелеп ята, кешеләр күренеү менән икенсеһе уға һорау бирә башлай. Тегеһе «ер аҫтынан» тауыш бирә. Хәйер-саҙаҡа йыйыу өсөн аллаһыҙҙар ул замандарҙа ла оятһыҙлыҡҡа барған, хәҙер иһә улар тағы ла күберәк. Бер-ике сүрә ятлап алыу менән өшкөрөп-төкөрөп аҡса йыйыусылар — үҙҙәрен Алланан юғары ҡуйыусы тәкәбберҙәр һәм кафырҙар ул. «Минең һүҙемде арзанға һатып йөрөмәгеҙ», — тигән Аллаһу Хаҡ тәғәлә. Шуны онотмаһаҡ икән.

Ҡайһы берҙә сихырсы үҙенең шайтандар менән бәйле икәнен белмәүе лә мөмкин. Ғәҙәттә ундай кеше шәриғәткә буйһонмай, ҙур гөнаһтар ҡыла йәки Аллаға тиң ширк тота. Шайтан иһә үҙ һәләтенә инандырыр өсөн уға ҡайһы бер нәмәләрҙе аса, ҡыҙыҡтыра, фәрештәләргә килгән хәбәрҙән яҙа-йоҙа ишетеп өлгөргәнен эшкәртә. Сихырсы хатта суфый, шәйех дәрәжәһенә өлгәшеүе һәм үҙе артынан кешеләрҙе аҙаштырыуы, бергәләп тамуҡ киҫәүҙәренә әүерелеүҙәре мөмкин. Аллам һаҡлаһын!

Ҡөрьән Кәримгә ышанған иманлы әҙәмдәр изге китабыбыҙҙы ентекле өйрәнергә, Алланың фарманынан тайпылмаҫҡа бурыслы, ә инде бының

кереһен эшләүселәр һәр ике донъяның язаһына дусар булырҙар, тиелә дини китаптарҙа.

Йондоҙ ғилеме — астрология ла шул уҡ. Күк есемдәре үҙҙәре — Хаҡ тәғәлә яралтылмыштары, Уның ҡөҙрәтенә буйһоналар, Уның яҙғанынан тыш хатта орбиталарын да, тиҙлектәрен дә әҙгә генә үҙгәртә алмайҙар. Шулай булғас, улар нисек һайлар хоҡуҡ, аң бирелгән әҙәми затты буйһондора алһындар! Ә инде йондоҙ юрамыштары биреүселәр — ысын сихырсылар, кафырҙар һәм үҙҙәрен хатта Аллаһы тәғәләнең ниәтен белеп тороусы көс итеп күрһәтмәкселәр. Алланың ниәтен белер өсөн бит, туғанҡайҙар, Унан да ҡөҙрәтлерәк булырға кәрәк!

«Күрәҙәгә барма, башыңа бәлә алма», ти халыҡ. Ниҙән башлана һуң күрәҙәләргә ышаныу, уларҙан ниндәйҙер ярҙам көтөү? Ни булырын дөрөҫ итеп әйтһәләр ҙә, әгәр ул яҙмышыңа яҙған һынау икән, барыбер бер хәл дә итә алмаясаҡһың бит.

Күрәҙәләргә ышаныу — наркотик һымаҡ ул, әҙҙән башлана, шул уҡ йондоҙнамәләрҙән, мәҫәлән. Беҙ бит тик һәйбәт нәмәләрҙе генә баҫабыҙ, тиҙәр мөхәррирҙәр. Халыҡты күрәләтә күрәҙә ҡосағына ташлауҙарын аңламайҙар йә аңларға теләмәйҙәр. Уйлап тораһы юҡ бит, Интернеттан һоҫоп алдың — «мөйөш» тулырлыҡ материал әҙер.

Халыҡ йондоҙнамә уҡырға ярата, тиҙәр. Иблис гөнаһлы эштәрҙе матур, ҡыҙыҡтырғыс итеп күрһәтә белә шул.

Йондоҙнамәнең күренеп торған зыяндары:

1. Алланың ниәтен белеп торорлоҡ, тимәк, унан да ҡеүәтлерәк көс бар, тигән уйҙы аңға һеңдереү — иҫ киткес гөнаһ! Динебеҙҙә бит Аллаға хатта тиң тоторға ярамай, был мәңгелек тамуҡҡа индереүсе ғәмәл тип һанала.

2. Кеше үҙаллылығын юғалта, ҡарарһыҙға әүерелә — берәй нәмә эшләр булһа, йондоҙнамәгә тотона. Һөҙөмтәлә, алтындан ҡиммәт ваҡытын юғалтыуы, йәки ашығып ашҡа бешеүе, яңылышыуы, яҙмышын емереүе мөмкин.

3. Йондоҙҙар шулай ҡушҡан, тип, хатаһына дөрөҫ баһа бирмәй, фәһем алмай.

4. «Йондоҙнамә ғилемен өйрәнеүсе — сихыр тармағына инеүсе булыр», тиелә хәҙистә. Кеше үҙе лә һиҙмәй сихыр, йәғни йондоҙнамә менән мауыға башлай, ә был ғәфү ителмәй торған ауыр гөнаһтарға инә.

5. Кеше диндән алыҫлаша, Аллаға таянмай һәм Уның асыуына дусар була.

6. Кеше зарарлы нәмә уҡыуға ваҡытын исраф итә, ә гәзит-журналдың майҙаны әрәм була.

Киң мәғлүмәт саралары йондоҙнамә урынына халыҡты иманлы итеп тәрбиәләүгә өлөш индерерлек фәһемле, ғибрәтле әйберҙәр бирһә, үҙҙәре лә, халыҡ та отор ғына ине.

## Ҡыҫтырғыс

Кеше заты тыныс ҡына, ҡәнәғәт кенә булып йәшәй белмәй, юҡлыҡҡа түҙә, барлыҡҡа түҙмәй — бала саҡта, аптыратып, шулай ти ҙә әйтәләр ине ололар. Ышандырмай ине әйткәндәре.

Өләсәйем менән өй тулы бала-саға тырым-тырағай ташлап киткән уйынсыҡтарҙы йыябыҙ. Пластмасса яңы тарала башлап, әллә ни күрелгән саҡ. Исемде лә таба һалды бит әле ауыл кешеһе — ҡауырһын тип кенә ебәрәләр. Ана шул ҡауырһын ҡашығаяғыбыҙ ҡыршалаған, әлүмин балғалаҡтарыбыҙ «бөҙрәләнгән», папье-маше ҡурсағыбыҙҙың танау урынында — өңрәйгән тишек, ҡасандыр алһыуланып, янып торған яңаҡтары ҡырылған, атайым алып ҡайтҡанда буяуҙары аңҡып торған йылтыр йәшел машинабыҙҙың кузовы айырылып төшкән.

— Атайыңдың етенселә уҡыған дәфтәрен ҡара әле, йыл буйына еткергәйне, — тип уфтана өләсәйем. — Өс кенә бөртөк буяу ҡәләме әпиргәйнем, мәктәпте бөтөргәнсе еткерҙе шуны. И-их, белмәйһегеҙ әйбер ҡәҙерен! — Һәм юғарыла иҫемә төшөрөп киткән һүҙҙәре менән хәбәрен ослап ҡуя.

Атайымдың ул дәфтәре әле лә күҙ алдында — музейға ҡуйырлыҡ, бөхтә, яҙыуы матур, ваҡ ҡына, һыҙмалары төҫлө ҡәләмдәр менән биҙәлгән. Ҡағыҙ етмәгән, гәзит ситтәренән, ҡатырға киҫәктәренән дәфтәр тегеп хитланған осорҙа әллә ниндәй байлыҡ булып иҫәпләнгән инде ул өр-яңы, таҙа дәфтәр! «Халыҡ дошманы» балаһына ҡайҙан килеп юлыҡҡандыр инде. Хәйер, атайымдың бәләкәйҙән бөтмөр, малтабар, тырыш булғанын өләсәйем ҡунаҡҡа килгән сағында юҡ-юҡ та һөйләп ҡуя торғайны.

— Туғыҙынсыла ғына уҡыған сағында сауҙа итеп, Аҫҡын баҙарынан яҙғы һыуҙа һыйыр алып ҡайтҡан егет бит әле ул атайың. Бигерәк тырыш булды Ырҙаманым, — тип баш сайҡап ҡуйыр ине.

Ырҙаман — Рамаҙандың ҡатай варианты ул.

Аҫҡын баҙары тигәне — әлеге Архангель районы үҙәге. Белорет районының Инйәр ҡасабаһына терәлеп ятҡан Уҫманғәле ауылынан нисәмә саҡырымға һуҙылған Елмерҙәк аша өймәкәй тейәлгән ҡул санаһы менән ҡар кисә-кисә төшөп ҡара әле! Бөгәсә төҙөк, таҙартылып торған шул трассала машиналы килеш ни рәүешле аҙапланалар — мәкерле борolоштарын, текәлеген ҡәһәрләй-ҡәһәрләй, шоферҙар «Тещин язык» тип атама биргән хатта.

Атайым ул ваҡиғаны үҙе лә бер саҡ иҫләп ултырғайны.

Репрессияға эләгеп, күпмелер ваҡыттан хәбәр-хәтере килеүҙән туҡтаған олатайымдың имен-аман ҡайтырына барыбер ҙә өмөтөн өҙмәгән өләсәйем ҡара эшкә шәп ине: айҙар буйы береһенән-береһе ваҡ балалары менән арҡан ишәләр, кишер үҫтереп, повидло яһайҙар, урыҫтарға бесән эшләйҙәр, әрҙәнә ҡырҡалар, еләк һаталар.

Уртансы улы булһа ла, йорт хужаһы дилбегәһен уҡыуға ла зирәк, эшкә лә сымыры, ҡулында ут уйнатҡан атайыма тоттора өләсәйем. Туғыҙынсыны бөтөр йылы ҡул санаһына «хаҙауай тауар» — арҡан, сабата тейәп, «түбән яҡҡа» — Архангель районына төшәләр.

Ҡатайҙар, тарихтан күренеүенсә, ҡумырыҡ-табындар менән телләшеңкерәп, сәкәләшеңкерәп йәшәһә лә, бер-береһенән артыҡ айырылып та китмәгән. Көнсығыштан бер ваҡытта ҡубарылып сығып, Уралда ла бер тирәгәрәк урынлашҡан. Ни тиһәң дә, өйрәнгән яу һуғышмаға яҡшы. Тау ашаһынан төшөп, ҡыҙ бирешеп, ҡыҙ алышып, ҡоҙалашып йәшәгәндәр. Өләсәйемдең өләсәһе Бишулдан, йәғни Бишауыл-Уңғарҙан булғанлығы мәғлүм.

Ҡумырыҡтар беҙҙең яҡҡа ағас-таш, өй алмаға килһә, ҡатайҙар он-ярма, тоҡомло мал артынан Аҫҡынға юлланған. Әллә күпме көләмәстәр һаҡлана халыҡ хәтерендә ошо мөнәсәбәттәр хаҡында. Өфө—Шишмә тимер юлында Ыраутау тигән туҡталыш бар. Егерменсе быуат аҙағына тиклем мең аҙаптар менән үтеп йөрөлгән шул һыртта ҡумырыҡ менән ҡатай һуғышҡан, ти. «Ыраутауҙың арҡаһында ҡатай һуҡты арҡаға. Мин бармамын, ҡатай килер, тоғон йөкмәп арпаға», — тип үпкәләп таҡмаҡлаған, имеш, ти «түбән яҡ» күрше.

Хуш, һүҙ айышы атайымдың һыйыр алып ҡайтыу сәхифәһенә бәйле бит әле. Кейем-һалым, он-ярма алыр ниәттән үрелгән арҡан менән сабатаны, кишер повидлоһын яҡшы ғына хаҡҡа һатып ебәргәс, атайым аҡсаны иҫәпләп ҡараған да:

— Әсәй, әҙерәк һатыулашһаҡ, һыйырға етә бит был, әйҙә сепрәк-сапраҡҡа тыҡмайыҡ. Был яҡтың малы эрерәк тә, һөтлөрәк тә, тиһең бит үҙең, — ти икән.

Атайыма мал маяһы итеп өләсәйем етәкләтеп ебәргән ул ҡара һыйырҙы мин дә хәтерләйем әле — һөтлө булды, әммә һөҙгәк ине. Шул холоҡһоҙлоғо арҡаһында бер Инйәр урыҫына һатып ебәрҙеләр үҙен. Яңы хужаһы малҡайҙың мөгөҙөн киҫеп ташлаған да, осһоҙға ғына шәп һыйыр һатып алғанына оҙаҡ йылдар бик кинәнгән, ти. Атайымдың тәжрибәһеҙлеге инде, бүтән һыйырҙарҙан артыҡ уңманылар, шуға үкенер ине.

— Һай, ул һыйырҙы алып ҡайтҡандағы аҙаптар! — тип иҫләп ултырғайны атайым. — Ҡыуып килә торғас, ысҡынып китә лә, артҡа саба. Һарыһыуҙы кисә-кисә, илай-илай йүгерәм. Әммә һөткә тейенеп ҡалдыҡ, исмаһам. Юғиһә, май планын тултыра алмай интегә инек.

— Ыҙаға түҙҙек, — тиер ине өләсәйем. — Йәштәр туйып һикерә, икмәк аяҡ аҫтында ята хәҙер, хәйерлегә булһа ярай ине. Ҡасан бер икмәкте күкрәккә терәп телеп, туя ашарбыҙ икән, тип аслыҡтан яфаланған саҡтар онотолдо.

...Икмәк аяҡ аҫтында ятты шул «торғонлоҡ» тип аталған йылдарҙа. Беҙҙең яҡта иген үҫмәй, бешкән икмәкте кибеттән мал һимертергә тоҡ-тоҡ тейәп алып ҡайта башланылар — ҡатнаш аҙыҡтан арзанырағҡа төшә, тиҙәр ине.

Үҙгәртеп ҡороу зилзиләһе һанаулы ғына айҙарҙа халыҡты бөлгөнлөккә төшөрҙө, ғүмер буйы кассаға тинләп йыйып һалған аҡсалары елгә осто. Ике сумаҙан менән донъя көтә башлап, үҙ көсөбөҙ менән генә йәшәгәс, ғаиләбеҙҙең ундай һаҡлантыһы булманы, әммә балаларҙы страховать итеп, ауыҙҙан өҙөп, аҡса һалып барғайныҡ. Башҡалар менән сағыштырғанда, артыҡ юғалтманыҡ, шөкөр. Динебеҙҙе өйрәнгәндә, процентҡа аҡса

биреү һәм һалыуҙың оло гөнаһ икәнен белеп, уйлап ҡуйҙым — бына шундай осраҡтар килеп сығырын иҫкәртеп тә һалынғандыр ул тыйыу.

Дәһрилек осоронда имгәнгән рухыбыҙ, үҙгәрештәр башланғас, йәнә лә ауырыраҡ сирҙәргә дусар булды — элек белмәгән сирҙәр йәнебеҙҙе, тәнебеҙҙе ғәриплергә тотондо.

Бойороҡ көтөп, шул уҡ ваҡытта уға артыҡ буйһоноп бармай, «һөкәмәт үҙе белер әле, бер еренә ҡуйыр әле» тип кенә фекерләп күнеккән күпселек демократия тип аталған аңлайышһыҙ нәмәне «ни менән ашарға» икәнен тойомлай башлағансы, майлы-майлы киҫәктәр йылғырҙар ҡулына күсеп тә өлгөрҙө. Ҡалабыҙ үҙәгендәге эре сауҙа ойошмаһы юҡҡа сыҡҡандағы күренеш шул осорҙоң символы рәүешендә хәтеремә уйылып ҡалды.

Балаларҙың атаһы бер көн көлә-көлә ҡайтып инде. Йәш аралаш көлөү тип тә атарға булалыр беҙҙең ул саҡтағы халәтте.

Етмеш һөнәр эйәһе, әммә бер ҡайҙа ла хеҙмәттәштәре танып бөткәнсә эшләргә сабырлығы етмәгән бер танышыбыҙҙы осратҡан икән ҡайтып килешләй. Яурынына ауыр ҡыҫтырғыс (тиски) ултыртып алған, ти. Уның нәмәһе көлкө инде, тип уйлап ҡуйған булдым.

Ағай «блат» ояһы һаналған сауҙа ойошмаһына, балта оҫтаһы булыпмы, яңыраҡ ҡына урынлашҡайны. Бүреһе олой башлап та өлгөрмәне, китте үҙгәртеп ҡороуҙар, дөрөҫөрәге, юҡка сығарылды «Белторг». Әле ҡасан ғына тупһаһын ҡаланың дәрәжәле түрәләре генә тапай, өҫтәлдәре артында эйәктәре менән генә ҡарап, ә табын түрҙәрендә иң хөрмәтле урындарҙы биләп ултыра торған «ер аллалары» идара иткән ойошма «бышт» итеп кенә аяҡ һуҙҙы ла ҡуйҙы.

Бойороҡ килеп етер-етмәҫтән, кем нәмәгә өлгөрә, шуны таратып алып та бөткәндәр, ти. Ул заман гәлсәр яҡтыртҡыстар, келәм-балаҫтар, хатта юҡ-бар ғына ҡорамалдар ҙа харап баһалы ине — ярты көн эсендә ике ҡат та ҡола ялан булып ятҡан да ҡалған.

— Ҡарап-ҡарап торҙом да, мин дә ошо ҡыҫтырғысты приватизацияларға булдым, — ти икән ағай. — Хәзәйстваға кәрәге тейер әле.

Ана шулай аҙҙыра шайтан, эйәртә. Иблис яман нәмәне лә матур итеп күрһәтә, ҡыҙыҡтыра белә, ти шул. Ә үҙенең «ҡыҫтырғыс»ына бер эләктерһә, ҡотолоуҙары — ай-һай! Бармағыңа хәрәмде алтын балдаҡ итеп кейҙерер ҙә ебәк яулыҡ итеп муйыныңа һалыр, унан инде элмәккә әүерелдереп, алҡымыңдан алыр ҙа донъя менән хушлаштырыр. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күптәр шул «ҡыҫтырғыс»тан бүтәнсә сыға алмай ҙа ҡуя, иманы көсһеҙләнә. Мосолман һәр аҙымын үлсәп баҫырға тейеш шуға күрә.

Заманаһы шулай, тип хәрәм малға ынтылыусылар, ҡан ҡойоп, мутлашып бол туплаусылар был донъяла уҡ язаһын ала тора, ә теге донъялағы язаларҙан, тамуҡ уттарынан Аллаһы тәғәлә беҙҙе үҙе һаҡлаһын һәм гөнаһтарҙан аралаһын, шөкөр итә белеүҙе насип ҡылһын.